# ТИҘӘЙТКЕСТӘР-скороговорки

Телмәр үҫтереү

Алланған алма аша,
Балдары тама-тама.
Аша алһыу алманы,
Балына мана-мана.

*Абағаға баға-баға,*
*Башым бәрҙем бағанаға.*

*Бүрәнәгә баҫты бүҙәнә,*
*Бүҙәнәне баҫты бүрәнә.*
*Ғәйеп бүрәнәлә лә бар,*
*Бүҙәнәлә лә бар.*

*Һибәт менән Һәтисә*
*Ике ҡалаҡ һөт эсә:*
*Бер ҡалағын Һибәт эсә,*
*Ә беренен - Һәтисә.*

Өммөгөлсөм өләсәйем
Өлөштәрен өләшә.

Һеҙҙең Зөфәр бөҙрә булһа,
Беҙҙең Зөһрә лә бөҙрә.

*Әлимә, Әсмә, Әлиә*
*Күмәкләшеп сәй эсә.*

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙен биш башы.
Биш бесәйҙен биш башына
Емерелмәһен мейес ташы

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙең биш башы,
Биш бесәйҙең биш башына
Төшмәһен мейес ташы.